БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК И ЛИТЕРАТУРА В УСЛОВИЯХ ГЛОБАЛИЗАЦИИ И ПОЛИЭТНИЧЕСКОЙ СРЕДЫ: ОПЫТ И ПЕРСПЕКТИВЫ

ISBN 978-5-91608-181-7 С. 116-118

https://doi.org/10.31833/conf_ihll2019.023

УДК 81.373.21:811.512.141

**Д. Р. Дәминева**

*Ордена «Знак Почета» Институт истории, языка и литературы УФИЦ РАН*
*проспект Октября, 71, Уфа, 450054, Россия*
*E-mail: d.zamanova@yandex.ru*

# НАСРЕТДИН БИНЕ БОРҺАНЕТДИН РАБҒУЗИҘЫҢ «ҠИССАС ӘЛ-ӘНБИӘ» ӘҪӘРЕ[1]

В данной статье речь идет о популярном произведении среди башкирского народа “Жития пророков” (“Киссас аль-анбия”), автором которого является Насретдин бин Бурханетдин Рабгузи.

На сегодняшний день в башкирской литературоведении чрезвычайно мало информации о данном памятнике. Возникает потребность в изучении данного сочинения средних веков, так как при археографических экспедициях во время сбора материалов встречаются старопечатные книги и рукописи. Одна из таких книг, которая привлекла внимание эта – “История о пророков” (“Тарих анбия”).

*Ключевые слова:* башкирская литература, “Жития пророков” (“Киссас аль-анбия”), Насретдин Рабгузи, “История о пророков” (“Тарих анбия”), археографическая экспедиция.

Урта быуат көнсығыш-төрки әҙәбиәтендә пәйғәмбәрҙәр, дин башлыҡтары тураһындағы әҫәрҙәр шаҡтай ҙур урын алып торған. Уларҙың тәүге үрнәктәре ғәрәп әҙәбиәтендә барлыҡҡа килгән. X-XI быуаттарҙа ғәрәптәр араһында бигерәк тә Мөхәммәт бине Жәрир әт-Табариҙың (838-923 йылдар) «Тарих әр-рәсүл вә әл-мөлөк» («Пәйғәмбәрҙәр һәм батшалар тарихы») тигән китабы популяр булған [Баимов, 2006, 128]. Ислам дине таралыу менән бындай китаптар бүтән телдәргә, шул иҫәптән төрки теленә, тәржемә ителгән. Һуңыраҡ ошо тәржемәләр нигеҙендә яңы төр әҫәрҙәр тыуған.

Октябрь революцияһына тиклем пәйғәмбәрҙәр тураһындағы китаптарҙың башҡорттар һәм татарҙар араһында иң киң таралғаны – Насретдин бине Боһранетдин Рабғузиҙың «Ҡиссас әл-әнбиә» («Пәйғәмбәрҙәр хаҡында ҡиссалар» йыйынтығы) [История о пророках, 1992, 54]. Рабғузи (ысын исеме Борһанетдин уғлы Насретдин) – Алтын Урҙа осоро әҙибе. Яҙыусының тормошо Алтын Урҙаның Хорезм төбәге менән бәйле булған. XIII быуаттың икенсе яртыһында – XIV быуаттың беренсе яртыһында йәшәгән һәм ижад иткән. Тормошо хаҡында мәғлүмәттәр аҙ һаҡлаған. Шуныһы билдәле: Рабғузи Рабат Уғыҙ ҡалаһында ҡазый булып эшләгән, уның әҙәби псевдонимы, тахаллусы шул ҡала исеменә бәйле [История башкирской литературы, 1990, 235].

---

[1] Исследование выполнено при финансовой поддержке РФФИ и РБ в рамках научного проекта «Арабографичные письменные памятники западных районов РБ», 18-412-020009 р_а.

Яҙыусының төп ижад емеше «Ҡиссас әл-әнбиә», 1309-1310 йылдарҙа яҙылған, башҡорттар араһына Урта Азиянан килгән һәм таралған [История о пророках, 1992, 4]. Был әҙәби ҡомартҡы Иҙел буйында, Төнъяҡ Хорезм территорияһында, Урта Азияның Рәбат Уғыҙ ҡалаһында яҙылған. Уны автор шул уҡ ваҡытта ислам динен ҡабул иткән монгол бейгә Насретдин Туҡбоғаға арнаған [История о пророках, 1992, 54]. Китап, махсус рәүештә пәйғәмбәрҙәр тормошон хикмәтләп йәнле тасуирлауынанмы йәки аҙаҡ Ҡазанда 1859-1896 йылдар эсендә алты тапҡыр айырым китап булып баҫылыуы арҡаһындамы, Урал-Волга буйҙарында киң танылыу тапҡан [История башкирской литературы, 1990, 239]. Ул Урал-Волга регионында тәүҙә ҡульяҙма килеш таралған һәм, 1859 йылда татар мәғрифәтсеһе Рәхмәтулла Әмирханов тырышлығы менән нәшер ителгәндән һуң, ҡат-ҡат баҫылып, тағы ла күберәк уҡыусыны йәлеп иткән [История о пророках, 1992, 54]. Бындай күсәгилешлек «Ҡиссас әл-әнбиә»нең әһәмиәтен һәм үҙенсәлеген юҡҡа сығармаған, киреһенсә, уны уникаль ҡомартҡы иткән, сөнки Рабғузи бында булған сығанаҡтарға үҙе йәшәгән осор өсөн характерлы булған элементтар ҡушҡан. Шул рәүешле яҙыусы, иҫке һәм яңы традицияларҙы оҫта ҡулланып, структураһы һәм йөкмәткеһе яғынан үҙенсәлекле әҫәр ижад иткән.

Шундағы Мөхәммәт пәйғәмбәр, айырыуса Ибраһим, Исмәғил, Ғайса, Сөләймән, Муса, Йософ, Дауыт пәйғәмбәрҙәр ҡиссалары тибында, шуға эйәрепме – нисек, шул сюжеттар аҙаҡ башҡорттар һәм татарҙар араһында айырым-айырым йә циклик формала үҙ аллы ҡиссалар (мәҫәлән, “Ҡисса-и Йософ” әҫәре) ижад ителгән.

Шундайҙарҙан Башҡортостандағы ҡульяҙмалар фондтарында сәсмә һәм теҙмә тәртибендәге байтаҡ өлгөләре бар. “Ҡыссас әнбиә” әҫәренең традицияларын дауам итеп “Пәйғәмбәрҙәр тарихы” (“Тарих әнбиә”) тигән китаптар донъя күрә. Был китаптар мәҙрәсәләрҙә уҡытыу өсөн ҡулланылған.

Быйыл көҙ көндәрендә тарих, тел һәм әҙәбиәт институты хеҙмәткәрҙәре Дәүләкән ҡалаһына Археографик экспедицияға барып ҡайтты. Һөҙөмтәлә күп кенә ғәрәп һәм иҫке төрки телендә иҫке баҫма китаптар, ҡульяҙмалар йыйылды. Ошо сығанаҡтар араһында беҙҙең ихтибарыбыҙҙы “Тарих әнбиә” йәлеп итте. Был иҫке баҫма китапта ла пәйғәмбәрҙәр тураһында бәйән ителә. Миҫал өсөн бер өҙөктән тәржемә:

*“Шәғайб ғәләйһи әс-сәләм*

*Хәҙрәт Шәғайб, һәр төрлө боҙоҡлоҡларны килә (эшләй) торған “әйкә” үә “мәдйән” халыкты хаҡ дингә, тоғры (дөрөҫ) юлға өндәр өсөн ебәрлегән бер пәйғәмбәрҙер Шәғайб хәзрәт һөйләргә бик оҫта үә һүҙләре бик аҫарлы булыуынан үҙенә “хатиб әнбиә” ләкәбен (исемен) биргәндер. Шулай була тороубыҙҙа был боҙоҡ кәүем хәмишә (бер ҙә) тоғры юлға килмәйенсә үҙ аҙғынлыкларында дауам иттеләр. Ахырында былар Аллах Тәғәләнең ғазабына дусар булдылар: ғәҙәттән тыш бер эҫҫелек булып бер аҙнаға һуҙылды. Хатта йылғаларҙағы һыуҙар ҡайнаб сыкты. Һуңынан өҫкә бер болот килде. Улар эҫҫелектән ҡасып болот аҫтына йыйылдылар. Ләкин болоттан ут яуып барыһында һәләк итте”.*

Был китабта ошоға оҡшаш ҡыҫҡа-ҡыҫҡа хикәйәләр бар. Бында Шеш ғәләйһиссәләм, Хәҙрәт Иҙрис ғәләйһиссәләм, Нух ғәләйһиссәләм, Һуд ғәләйһиссәләм, Салих ғәләйһиссәләм, Ибраһим ғәләйһиссәләм, Лот ғәләйһиссәләм, Исмағил ғәләйһиссәләм һ.б. тураһында бәйән ителә.

Башҡорт ерлегендә Лот, Һуд, Яҡуб пәйғәмбәрҙәр менән бәйле төрлө дини риүәйәттәр, легендалар башҡорттар араһында электән таралып йәшәп килгән һәм әлеге ваҡытта улар төрлө ҡульяҙмалар рәүешендә теркәлеп архивтарҙа, китапхана фондттарында һаҡланылған.Шулай итеп, Көнсығыш мәҙәниәте менән башҡорт әҙәбиәтенең үҙ-ара бәйләнеше боронғо дәүерҙәрҙән алып килә. Әҙәби бәйләнеш һәм үҙ-ара йоғонто шаҡтай ҡатмарлы һәм асылда эске бер ижади процесс. Контактлы бәйләнеш, ғәҙәттә, генетик яҡынлыҡ, типологик оҡшашлыҡ менән тығыҙ үрелә.

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы “Ҡиссас әл-әнбиә” ҡомартҡыһы башҡорт әҙәбиәт ғилемендә бик аҙ яҡтыртылған. Рабғузиҙың әҫәренә тәрән әҙәби анализ кәрәк, сөнки археографик экспедиялар ваҡытында пәйғәмбәрҙәр тураһында иҫке баҫма китаптар, ҡульяҙмалар йыш ҡына осрай. Риүәйәт һәм легенда рәүешендә халыҡ телендә бөгөнгө көнгә тиклем хаҡланылған, археографик эҙләнеүҙәр быны асыҡлай. Табылған материлдар өҫтөндә сағыштырма планда ҙур эш башҡарыр кәрәк.

## Әҙәбиәт

Баимов Р.Н. История башкирской литературы и её древние источники // Агидель. 2006. № 9. С. 125–148.

История башкирской литературы. В шести томах. 1 том. Средние века / Под ред. Хусаинова Г.Б. Уфа: Китап, 1990. 608 с.

Поэма «Кысса-и Йусуф» Кул Гали (Проблематика, поэтика, язык произведения). Уфа, 1988. 124 с.

История о пророках. Казань: Татарское книжное издательство, 1992. 144 с.

Хусаинов Г.Б. Литературоведческий словарь. Уфа: Китап, 2006. 246 с.

Хусаинов Г.Б. Теория литературы. Уфа: Китап, 2010. 408 с.

**D. R. Damineva**

*Order of the Badge of Honour Institute of History,*
*Language and Literature UFRC Russian Academy of Sciences*
*October Avenue, 71, Ufa, 450054, Russia*
*E-mail: d.zamanova@yandex.ru*

## THE WORK OF NASRUDDIN BIN BURHANUDDIN RABGUZI “THE LIVES OF THE PROPHETS”

This article is about a popular work among the Bashkir people “The Lives of the Prophets” (“Kissas al-Anbiya”). author it books have by Nasretdin bin Burkhanetdin Rabguzi.

To date, Bashkir literary has extremely little information about this monument. There is a need to study this composition of the Middle Ages, since during archaeographic expeditions during the collection of materials there are old printed books and manuscripts. One of these books, which attracted the attention it is “The Story of the Prophets” (“Tarih Anbi”).

*Keywords:* Bashkir literature, “The Lives of the Prophets” (“Kissas al-Anbiya”), Nasretdin Rabguzi, “The Story of the Prophets” (“Tarih Anbiya”), archaeographic expedition.

## References

Baimov R.N. The history of Bashkir literature and its ancient sources // Agidel. 2006. №9. p. 125-148.

Khusainov G.B. Literary Dictionary. Ufa: Kitap, 2006.246 p.

Khusainov G.B. Theory of literature. Ufa: Kitap, 2010.408 p.

History of Bashkir literature. In six volumes. 1 volume. Middle Ages / Ed. Khusainova G.B. Ufa: Kitap, 1990.608 p.

The poem "Kissa-i Yusuf" Kul Gali (Problems, poetics, language works). Ufa, 1988. 124 p.

The story of the prophets. Kazan: Tatar Book Publishing House, 1992. 144 p.